Ахунова
Резеда
Гиратовна

Подписан: Ахунова Резеда Гиратовна
DN: C=RU, OU=директор, O=" АНПОО "" Бирскооптехникум""", CN=Ахунова Резеда Гиратовна, E=birsk.kt@mail.ru
Основание: я подтверждаю этот документ своей удостоверяющей подписью
Местоположение: место подписания
Дата: 2022-02-16 17:29:48
Foxit Reader Версия: 9.7.2

Автономная некоммерческая организация
среднего профессионального образования
«Бирский кооперативный техникум»

УТВЕРЖДАЮ
Директор
___________ Р.Г.Ахунова
«31» 08 2018 год

УТВЕРЖДАЮ
Директор
___________ Р.Г.Ахунова
«30» 08 2020 год

УТВЕРЖДАЮ
Директор
___________ Р.Г.Ахунова
«31» 08 2019 год

УТВЕРЖДАЮ
Директор
___________ Р.Г.Ахунова
«30» 08 2021 год

**КОМПЛЕКТ**
**КОНТРОЛЬНО – ОЦЕНОЧНЫХ СРЕДСТВ**
**ПО УЧЕБНОЙ ДИСЦИПЛИНЕ**

# ОГСЭ.07 БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК В ПРОФЕССИОНАЛЬНОЙ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ

программы подготовки специалиста среднего звена
по специальности

**43.02.08 Сервис домашнего и коммунального хозяйства**

Рассмотрено на заседании предметно - цикловой комиссии
УГ 43.00.00 Сервис и туризм.
Протокол № 5 от 29.06 2018 г.
Председатель ПЦК ___________ Р.Р.Каратаева

Рассмотрено на заседании предметно - цикловой комиссии
УГ 43.00.00 Сервис и туризм.
Протокол № 1 от 28.08 2019 г.
Председатель ПЦК ___________ Р.Р.Каратаева

Рассмотрено на заседании предметно - цикловой комиссии
УГ 43.00.00 Сервис и туризм.
Протокол № 1 от 28.08 2020 г.
Председатель ПЦК ___________ Т.А.Полюдова

Рассмотрено на заседании предметно - цикловой комиссии
УГ 43.00.00 Сервис и туризм.
Протокол № 1 от 27.08 2021 г.
Председатель ПЦК ___________ Т.А.Полюдова

Комплект контрольно-оценочных средств по учебной дисциплине **ОГСЭ.07 Башкирский язык в профессиональной деятельности** предназначен для контроля умений и знаний, обучающихся по специальности среднего профессионального образования **43.02.08 Сервис домашнего и коммунального хозяйства**

Разработчик:

Гильмиярова Э.Р., преподаватель АНО СПО «Бирский кооперативный техникум»

**ОДОБРЕНО** Методическим Советом техникума

Протокол № 5 от 28.06.2018 г.

Председатель Методсовета Лутфулина А.А.

**РАССМОТРЕНО**

на заседании ПЦК УГ 43.00.00 Сервис и туризм

Протокол № 5 от 245.06.2018 г.

Председатель ПЦК Каратаева Р.Р.

**РАССМОТРЕНО**

на заседании ПЦК УГ 43.00.00 Сервис и туризм

Протокол № 1 от 29.08.2019 г.

Председатель ПЦК Каратаева Р.Р.

**РАССМОТРЕНО**

на заседании ПЦК УГ 43.00.00 Сервис и туризм

Протокол № 1 от 28.08.2020 г.

Председатель ПЦК Полюдова Т.А.

**РАССМОТРЕНО**

на заседании ПЦК УГ 43.00.00 Сервис и туризм

Протокол № 1 от 27.08.2021 г.

Председатель ПЦК Полюдова Т.А.

## СОДЕРЖАНИЕ


1. Паспорт комплекта контрольно-оценочных средств ....................................
2. Результаты освоения учебной дисциплины, подлежащие проверке ............
3. Оценка освоения учебной дисциплины ......................................................
   3.1. Формы и методы оценивания
   3.2. Типовые задания для оценки освоения учебной дисциплины
4. Контрольно-оценочные материалы для промежуточной аттестации по учебной дисциплине ..........................................................................................
5. Информационное обеспечение
6. Лист изменений

## Общие положения

## 1. Паспорт комплекта контрольно-оценочных средств

В результате освоения учебной дисциплины **ОГСЭ.07 Башкирский язык в профессиональной деятельности** обучающийся должен обладать предусмотренными ФГОС по специальности СПО 43.02.08 Сервис домашнего и коммунального хозяйства**,** Утвержденного Приказом Минобрнауки России от 13 марта 2018 года № 177, базовой подготовки умениями и знаниями, которые формируют профессиональные и общие компетенции.

Студенттар түбәндәге күнекмәләргә **эйә булырға тейеш:**

У1-башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, телмәрҙә ҡуллана алыу;

У2-сингармонизм законын практик эштә ҡуллана белеү;

У3-программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтә һәм ҡуллана белеү;

У4-һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә ҡарап, уларҙы телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыу;

У5-тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, монолог, хикәйә төҙөй белеү;

У6-һөйләмдәрҙә һүҙ тәртибен үҙләштереү; һорау, хәбәр, өндәү һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм һөйләү; был һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләрен ҡағиҙәгә ярашлы ҡуя белеү;

У7-дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;

У8-һорау һәм яуап бирә алыу;

У9-йәнле телмәрҙе тыңлау һәм төшөнөү; тексты уҡыу, аңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү;

У10-һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;

У11-ҙур булмаған изложениелар, бирелгән темаға инша яҙыу;

У12-рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, протокол, акт, автобиография, характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү;

У13-башҡорт телендә яҙма йәки телдән сығыш яһау.

Студенттар **белергә тейеш:**

З1-башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, дөрөҫ әйтеү ҡағиҙәләрен;

З2-сингармонизм законын үҙләштереү;

З3-программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм ҡулланылышын белеү;

З4-һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, уларҙың телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыныуы;

З5-тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, монолог, хикәйә төҙөй белеү;

З6-һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибен; һорау, хәбәр, өндәү һөйләмдәрҙең дөрөҫ интонация менән уҡылыуын; һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡағиҙәгә ярашлы ҡуйылыуын;

З7-дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;

З8-һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;
З9-ҙур булмаған, бирелгән темаға иншаларҙың дөрөҫ яҙылыуын;
З10-рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза,акт, автобиография, характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү;

Уҡыусыларға тейешле дөйөм компетенциялар:

ОК 1. Буласаҡ профессияның асылын һәм кәрәклеген аңлатыу, профессияға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу.

ОК 2. Үҙ эшмәкәрлекте, методтар ҡулланып ойоштора белеү.

ОК 3. Төрлө ситуацияларҙа сиселеш табыу.

ОК 4. Алынған мәғлүмәттәрҙе профессиональ үҫештә ҡулланыу.

ОК 5. Яңы технологиялар ҡулланып, мәҙәниәт мәғлүмәттәрҙе өйрәнеү.

ОК 6. Коллективта, командала эшләй белеү, коллегалар, етәкселәр менән һөйләшә белеү.

ОК 7. Һәр команда ағзаһы һәм һәр эштең һөҙөмтәһе өсөн яуаплы булыу.

ОК 8. Профессиональ үҫеш өсөн мәсьәләләрҙе асыҡлау, квалификацианы үҫтереү юлдарын өйрәнеү.

ОК 9. Профессиональ эшкәмәрлектә яңы технологияларҙың үҙгәреп тороуын яҡшы өйрәнеү.

Уҡыу дисциплинаһы буйынса аттестация формаһы – диффирицион зачет.

## 2. Материалды үҙләштереүгә контроль һәм билдә

2.1.Аттестация йомғағы буйынса алдағы белемдәр тикшерелә һәм компетенциялар асыҡлана:

Таблица 1

| Уҡытыуҙың һөҙөмтәһе (үҙләштерелгән белемдәр) | Уҡытыуҙа контроль һәм белем кимәлен билдәләү ысулдары һәм формалары | Аттестация формаһы |
|---|---|---|
| **Студенттар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:** | -практикала башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик һәм грамматик нормаларын телмәрҙә ҡулланыу; | **1)Көндәлек тикшереү –** телдән һәм яҙма рәүешендә үткәрелә: а) әҙәбиәттәр өйрәнеп, диалог, хикәйә төҙөү; б) лекцион темалар |
| У1-башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, телмәрҙә ҡуллана алыу;<br>ОК 1. Буласаҡ профессияның асылын һәм кәрәклеген аңлатыу, профессияға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу. | | |
| У2- сингармонизм законын практик эштә ҡуллана белеү; | -башҡорт теленең орфографик һәм пунктуацион нормаларын практикала ҡулланыу. | |
| У3-программала тәкдим ителгән темалар, | -телмәрҙә башҡорт | |

| | | |
|---|---|---|
| ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтә һәм ҡуллана белеү;<br>ОК 2. Үҙ эшмәкәрлекте, методтар ҡулланып ойоштора белеү. | теленең төп орфоэпик, лексик һәм грамматик нормаларын практик рәүештә ҡулланыу;<br>-башҡорт теленең орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә ҡулланыу. | буйынса үҙ аллы эштәр эшләү; в) телдән һәм яҙма һорауҙарға яуаптар биреү; г) темалар һәм бүлектәр буйынса тестар эшләү; д) эшләнгән эштәрҙе тикшереү.<br>**2) Рубеж тикшереү** – темалар буйынса тестар һәм үҙ аллы эштәр эшләү.<br>**3) Йыллык тикшереү** – темалар буйынса контроль эштәр эшләү.<br>**4) Йомғаклау-** дисциплина буйынса дифферецион зачет. |
| У4-һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә ҡарап, уларҙы телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыу;<br>ОК 3. Төрлө ситуацияларҙа сиселеш табыу. | -телмәр һәм башҡорт теленең орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә ҡулланыу.<br>-диалог, һөйләм төҙөү. | |
| У5-тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, хикәйә төҙөй белеү;<br>ОК 6. Коллективта, командала эшләй белеү, коллегалар, етәкселәр менән һөйләшә белеү. | -телмәр һәм башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу;<br>-диалог, хикәйә төҙөү. | |
| У6-һөйләмдәрҙә һүҙ тәртибен үҙләштереү; һорау, хәбәр, өндәү һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм һөйләү; был һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләрен ҡағиҙәгә ярашлы ҡуя белеү;<br>ОК 8. Профессиональ үҫеш өсөн мәсьәләләрҙе асыҡлау, квалификацияны үҫтереү юлдарын өйрәнеү. | -телмәр нормаларын, башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу. | |
| У7-дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;<br>ОК 4. Алынған мәғлүмәттәрҙе профессиональ үҫештә ҡулланыу. | -башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу. | |
| У8-һорау һәм яуап бирә алыу;<br>У9-йәнле телмәрҙе тыңлау һәм төшөнөү; тексты уҡыу, аңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү;<br>У10-һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;<br>ОК 5. Яңы технологиялар ҡулланып, мәҙәниәт мәғлүмәттәрҙе өйрәнеү. | -телмәр нормаларын, башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик һәм грамматик, орфографик һәм пунктуацион нормаларын практикала ҡулланыу. | |
| У11-ҙур булмаған изложениелар, диктант, бирелгән темаға инша яҙыу;<br>ОК 7. Һәр команда ағзаһы һәм һәр эштең һөҙөмтәһе өсөн яуаплы булыу. | -башҡорт теленең лексик һәм грамматик, орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу. | |
| У12-рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, протокол, акт, автобиография, характеристика, справка һ.б.) яҙа белеү;<br>ОК 8. Профессиональ үҫеш өсөн мәсьәләләрҙе | -телмәр нормаларын, башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик һәм грамматик нормаларын, | |

| | | |
|---|---|---|
| асыҡлау, квалификацияны үҫтереү юлдарын өйрәнеү. | орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу. | |
| У13-башҡорт телендә яҙма йәки телдән сығыш яһау.<br>ОК 6. Коллективта, командала эшләй белеү, коллегалар, етәкселәр менән һөйләшә белеү. | -башҡорт теленең төп орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик һәм пунктуацион нормаларын телмәрҙә (практикала) ҡулланыу. | |
| **Студенттар белергә тейеш:** | | |
| З1-башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, дөрөҫ әйтеү ҡағиҙәләрен;<br>З2-программала тәкдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен һәм ҡулланылышын белеү;<br>З3-һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, уларҙың телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралашыуҙа ҡуллана алыныуы;<br>З4-тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, хикәйә төҙөй белеү;<br>З5-дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;<br>З6-һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;<br>З7-ҙур булмаған диктант, бирелгән темаға иншаларҙың дөрөҫ яҙылыуын;<br>З8-рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғариза, акт, автобиография, характеристика һ.б.) яҙа белеү; | -телдең нормаларын телмәрҙә ҡуллана, анализ яһай белеү;<br>-телдән һәм яҙма диалогтар төҙөү, инша, диктант, диалог яҙа белеү. | |

## 3. Дисциплинаны үҙләштереү буйынса баһалау.

### 3.1.Яуаптарҙы билдәләү буйынса формалар һәм методтар

Башҡорт теле дисциплинаһын үҙләштереүҙе тикшереү практик эштәр, тестар эшләү, һорау алыу, үҙ аллы эштәрҙе билдәләү ярҙамында башҡарыла.

Рубеж контроль яҙма эштәр эшләү буйынса үткәрелә (шулай уҡ тестар).

Дисциплина буйынса йомғаҡлау аттестацияһының формаһы - диффиренцион зачет.

## 3.2.Темалар буйынса дисциплинаны үҙләштереүҙә контроль һәм билдә

Таблица 2

| Укыу дисциплинаһының элементтары | Контроль формалары һәм ысулдары | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Көндәлек контроль | | Рубеж контроль | | Йыллыҡ контроль | |
| | Контроль формаһы | У, З | Контроль формаһы | У, З | Контроль формаһы | У, З |
| I бүлек. Инеш.Башҡорт теле. Фонетика (ҡабатлау). Лексика. | | | | | *Диффирицион зачет* | *У 1, У 2, У 3;З 1, З 2, З 3, З 4* |
| Тема 1.1. Инеш. Башҡорт алфавиты (ҡабатлау). | *Практик эш №1* | *У 1, У 2, З 1, З 2, ОК.1, ОК.2* | | | | |
| Тема 1.2. З.Биишева “Башҡорт теле”. Һүҙ төркөмдәре (ҡабатлау). | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 1, У 3, З 1, З 3, ОК.1, ОК.3* | | | | |
| Тема 1.3. Төҫтәр. Көсәйтеү киҫәксәһе. | *Практик эш №2* | *У 3, У 2, З 3, З 4, ОК.3, ОК.2* | | | | |
| Тема 1.4. Һөнәрҙәр. Сикләү киҫәксәләре. | *Практик эш №3* | *У 3, У 6, З 3, З 6, ОК.5* | | | | |
| Тема 1.5. Өфө-Башҡортостандың баш ҡалаһы. Үҙләштерелгән һәм төп башҡорт һүҙҙәре. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 5, У 6, З 3, З 5, ОК.4, ОК.5* | *Контроль эш №1.”* | *У 1, У 2, У 3, У 6, З 1, З 2, З 3, З 6, З 4,ОК.2, ОК.3,* | | |
| II бүлек. Һүҙ төркөм дәре (ҡылым, рәүеш). | | | | | | |
| Тема 2.1. Үҙ аллы, ярҙамсы, тамыр һәм нигеҙ ҡылымдар. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 8, У 9, З 8, З 7,ОК.7, ОК.8* | | | | |
| Тема 2.2. Минең дуҫтарым. Бойороҡ һөйкәлеше. | *Практик эш №4* | *У 3, У 1, З 3, З 1, ОК.3, ОК.1* | | | | |
| Тема 2.3. Йомаҡтар һәм көләмәстәр. Ҡылым һөйкәлештәре: шарт һөйкәлеше. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 3, У 4, З 3, З 4, ОК.6* | | | | |
| Тема 2.4. Рәссамдар. Ҡылым һөйкәлештәре: хәбәр һөйкәлеше. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 6, У 7, З 6, З 7, ОК.5* | | | | |
| Тема 2.5. Мин Башҡортостандан. Теләк һөйкәлештәре. | *Практик эш №5* | *У 11, У 12,З 10, З 9, ОК.7, ОК.8* | | | | |
| Тема 2.6. Башҡортостан тәбиғәте. Ҡылым һөйкәлештәренең һөйләмдә ҡулланылышы. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 7, З 7, ОК.7* | | | | |
| Тема 2.7. Башҡортостандың билдәле кешеләре. Ҡылым төркөмсәләре: сифат ҡылым. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 13, У 2, З 2, З 9, ОК.9* | | | | |
| Тема 2.8. Мин студент. Уртаҡ ҡылым. | *Практик эш №6* | *У 8, У 9, З 8, З 9, ОК.5, ОК.1* | | | | |
| Тема 2.9. Бөйөк башҡорттар. Ҡылым төркөмсәләре: исем ҡылым. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 13, У 2, З 2, З 9, ОК.9* | | | | |
| Тема 2.10. Көн тәртибе. Хәл ҡылым. | *Практик эш №7* | *У 1, У 2, У 3, У 4, З 1, З 2, З 3, З 4, ОК.1, ОК.2* | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Тема 2.11. Тән өлөштәре. Ҡылым йүнәлештәре:төп, ҡайтым йүнәлештәре. | *Практик эш №8* | *У 7, У 2, З 7, З 2, З 10 ОК.4, ОК.5* | | | | |
| Тема 2.12. Нисек хәбәр итәргә? Төшөм йүнәлеше. | *Телдән һорауға яуап биреү* | *У 4, У 5, З 5, З 4, ОК.3, ОК.6* | | | | |
| Тема 2.13. Башҡортостан – бай ил. Ҡылым йүнәлештәре: уртаҡлыҡ йүнәлеше. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 4, У 5, З 5, З 4, ОК.6, ОК.3* | | | | |
| Тема 2.14. Яратҡан профессиям. Йөкмәтеү йүнәлеше. | *Практик эш №9 Үҙ аллы эш* | *У 8, У 2, З 2, З 8, ОК.1, ОК.8* | | | | |
| Тема 2.15. Яҙыусылар. Шағирҙар. Ҡылымдарҙың һөйләмдә ҡулланылыуы. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 13, У 2, З 2, З 9, ОК.9* | | | | |
| Тема 2.16. Бөйөк башҡорттар. Рәүеш. Рәүештәрҙең яһалышы. | *Практик эш №10 Үҙ аллы эш* | *У 13, У 2, З 2, З 9, ОК.9* | | | | |
| Тема 2.17. Хәрәкәт-таҙалыҡтың билдәһе. Рәүеш дәрәжәләре һәм төркөмсәләре. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 5, У 8, З 5, З 8, ОК.5, ОК.6* | | | | |
| Тема 2.18. Тән өлөштәре. Сифат һәм рәүештәрҙең һөйләмдә ҡулланылышы. | *Телдән һорауға яуап биреү* | *У 4, У 2, З 2, З 4, ОК.3, ОК.4* | *Контроль эш №2.* | *У 1, У 2, У 8, У 4, З 1, З 2, З 3, З 4, ОК.3, ОК.2* | | |
| III бүлек. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе ҡабатлау һәм нығытыу. | | | | | | |
| Тема 3.1. Магазинда. Һүҙ төркөмдәре (ҡабатлау). | *Телдән һорауға яуап биреү* | *У 1, У 5, З 1, З 5, ОК.1* | | | | |
| Тема 3.2. Башҡортостан ҡалалары. Ярҙамсы һүҙҙәр (ҡабатлау). | *Телдән һорауға яуап биреү* | *У 6, З 6, ОК.5* | | | | |
| Тема 3.3. Музыка ҡоралдары. Ярҙамсы һүҙҙәр:ымлыҡтар, мөнәсәбәт һүҙҙәр. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 6, З 6, ОК.5* | | | | |
| Тема 3.4. Ашханала. Тура һәм ситләтелгән телмәр. | *Телдән һорауға яуап биреү* | *У 1, У 5, З 1, З 5, ОК.1* | | | | |
| Тема 3.5. Йыл миҙгелдәре. Синонимдар. | *Практик эш №11 Үҙ аллы эш* | *У 1, У 8, У 7, У 10, З 1, З 7, З 4, ОК.5* | | | | |
| Тема 3.6. Яҙыусылар һәм шағирҙар. Антонимдар. | *Практик эш №12 Үҙ аллы эш* | *У 1, У 3, З 1, З 2, ОК.9* | | | | |
| Тема 3.7. Дауаханала. Табипта. Омонимдар. | *Практик эш №13* | *У 1, У 5, З 1, З 5, ОК.1* | *Контроль эш №3.* | *У 1, У 2, У 8, У 4, З 1, З 2, З 3, З 4, ОК.3, ОК.7* | | |
| IV бүлек. Синтаксис һәм пунктуация. | | | | | | |
| Тема 4.1. Башҡорт йолалары һәм байрамдары. Ябай һөйләм төрҙәре. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 9, У 10, У 11, З 5, З 6, З 9, ОК.8* | | | | |
| Тема 4.2. Театр сәнғәте. Ҡушма һөйләмдәр. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | *Телдән һорауға яуап биреү Үҙ аллы эш* | *У 8, У 10, З 8, З 10, ОК.4* | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Тема 4.3. Һинең профессияң. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. | *Практик эш №14* | *У 8, У 2, У 13, У 12, З 8, З 2, ОК.1, ОК.8* | | | | |
| Тема 4.4. Һин башҡортса һөйләшәһеңме? Ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙең телмәрҙәге роле. | *Телдән һорауға яуап биреү* | *У 4, У 5, З 4, З 5, ОК.3, ОК.6* | *Контроль эш №4.* | *У 3, У 2, У 4, У 8, У 12, У 13, З 1, З 2, З 3, З 4, З 12, З 13, ОК.6, ОК.7* | | |

## 4. Контроль эштәр үткәреү өсөн материалдар

### I бүлек. Инеш.Башҡорт теле. Фонетика (ҡабатлау). Лексика.

### Практик эш №1 Тема: сәләмләү, танышыу һүҙҙәрен ҡулланып, телдән һөйләмдәр төҙөү.

1. *Һөйләмдәрҙе тәржемә итеп, күсереп яҙырға:*

Минең әсәйем бик тырыш кеше. Ул мәктәптә балалар уҡыта. Әсәйем өйҙә лә күп эшләй: ашарға бешерә, бәйләй, кер йыуа. Әсәйем баҡсала эшләргә лә ярата. Мин уға ярҙам итәм.

2. *Дөрөҫ һөйләм төҙөгөҙ:*

Мин уҡыйым китап.

Гөлназ яҙа дәфтәргә.

Әсәй ҡоя ҡоймаҡ.

3. *Ҡалын менән яҙылған һүҙҙәрҙе килеш менән үҙгәртеп яҙырға:*

**Мәктәпкә** китте, **бесәйҙән** ҡурҡманылар, **ҡояш** күренде, Ағиҙел **аръяғынан, балаларҙың** бүлмәһе, **ашханаға** барам, **суртандың** ҡойроғо, **иҙәнгә** баҫты, **ултырғыстан** торҙо.

4. *Тексты күсереп яҙырға, сифаттарҙы табып, аҫтына һыҙырға, тәржемә итергә:*

Минең өләсәйем ауылда йәшәй. Йәй көнө мин ауылға барҙым. Ауылда кешеләр иртә тора. Мин дә иртә тороға өйрәндем. Өләсәйем малдарҙы көтөүгә ҡыуа. Мин өләсәйемә ярҙамлашам. Олатайым ат менән бесәнгә бара. Мин дә уға ултырып барам. Беҙ өйгә бесән алып ҡайтабыҙ. Малдар бесәнде яратып ашай.

5. *Башҡорт теленә тәржемә итергә:*

15 яблок

23 ученика

11 классов

3 этажа……………………………

17 лет……………………………..

6. *Парҙарын табып, күсереп яҙығыҙ:*

| | |
|---|---|
| килә | входит |
| инә | приходит |
| һикерә | берет |
| китә | прыгает |
| ала | ученик |
| уҡыусы | школа |
| мәктәп | уходит |

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

### Практик эш №2 Тема: бирелгән текстан көсәйтеү киҫәксәләрен күсереп, ҡағиҙә буйынса яҙыу.

**Терпе менән йылан.**

Борон-борон заманда урмандағы лапы ҫтында бик уҫал бер ҡара йылан йәшәгән. Был йыландан бөтә хайуандар ҙа, хатта ҡошар ҙа ҡурҡып торғандар. Ни өсөн тиһәң, йылан үлән араһынан шым ғына килә лә, ваҡ йәнлек осраймы, ҡошмо, шуны тере көйө йота ла ҡуя икән. Ә йотҡас, бөгәрләнеп, йоҡларға ята икән.

Шулай берҙән-бер көндө терпе, урманда аҙыҡ эҙләп йөрөй торғас, шул йылан өҫтөнә барып сыҡҡан. Йылан, бер нисә ҡат уралып, түп-түңәрәк булып, бер таш өҫтөндә ҡояшта ҡыҙынып ята икән. “Был ниндәй хайуан икән?” – тип уйлаған терпе. – Ни йөнө юҡ, ни ҡорһағы юҡ, ни ҡолағы юҡ, ни аяғы юҡ. Был нисек ҡуҙғалып йөрөй икән ер өҫтөндә?”

Ә йылан, башын кәшкәйтеп, терпегә туп-тура ҡарап ята, ти. Ике асалы нәп-нәҙек телен, ауыҙын асмайынса ғына, сығарып-сығарып ала, ти. Хатта аралаш-аралаш ыҫылдап та ҡуя икән йылан.

Терпе:

- Һин ниндәй хайуан булаһың? Ни аяғың юҡ, ни ҡорһағың юҡ, ни ҡолағың юҡ, - тигән.

Йылан, ғәйрәтләнеп китеп, тағы бер ыҫылдап ҡуйған да:

- Һин минең кем икәнлегемде белмәйһеңме ни әле? Мин ҡара йылан булам. Аяғым булмаһа ла, һинән шәберәк йүгерәм. Ҡолағым булмаһа ла, һинән яҡшыраҡ ишетәм. Ҡорһағым булмаһа ла, һинән ҙурыраҡ хайуандарҙы йотам. Мин саҡһам, ағыуымдан хатта һыйырҙар, айыуҙар, бүреләр ятып үлә. – тип маҡтанып алып киткән, ти.

Уның маҡтаныуы оҡшамаған терпегә.

- Шулай ҙа бик ҡотһоҙ икәнһең. Мин һинең кеүек һыпатһыҙ хайуанды күргәнем юҡ ине әле. Моғайын, берәйһенең ҡарғышы төшкәндер һиңә. Шуға ҡотһоҙ булып ҡалғанһыңдыр, - тигән йыланға.

-Әле минән көлөргә итәһеңме, арҡыраяҡ! Кәрәгеңде бирәйем әле. Бик асығып ята инем, бер һоғонорлоҡ ит булдың, - тип таш өҫтөнән төшкән.

-Һин түгел, төлкө ағайыңдың көсө етмәне әле миңә, - тигән терпе, иҫе китмәйенсә генә.

Йылан ауыҙын асып килә башлағайны, терпе шунда йомғаҡ кеүек йомарланған да ятҡан. Йылан, ғәйрәтләнеп килеп, терпене тешләйем тиһә, терпенең энә кеүек йөндәре тегенең ауыҙына ҡаҙалған да ҡуйған. Хатта ысҡындыра алмай, ти, был. Хәҙер терпене ашау түгел, ә баш ҡайғыһы, ти, йыланда. Арып, хәле бөткәнсе тартҡылашып, саҡ ысҡынған йылан. Ә терпе йыланды ңсекләй икән:

-Йә, бик маҡтана инең бит, ниңә ашамайһың? Ниңә саҡмайһың?

Йылан, терпене еңә алмағас, йәнә таш өҫтөнә менеп ятҡан. Терпе шул ике арала уның өҫтөнә һикергән, уны энәләре менән сәнскеләй башлаған. Йылан, алдын-артын ҡарамайса, һөйрәлеп барып, лапы аҫтына инеп киткән. Был ғәжәп хәлде башҡа йыландарға һөйләгән. Шул замандарҙан бирле йыландарҙың иң ҡурҡҡаны – терпе, ти, хәҙерге көндә лә.

Күнегеүҙе эшләү ысулы:

Текст таратып бирелә: уҡырға, тәржемә итергә, киҫәксәләр булған һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға.

Текст Ф.Ғ. Хисамитдинова "Уҡыу өсөн текстар" китабынан алына.

"Терпе менән йылан" (101 бит)

Баһалау:

"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Практик эш №3. Тема: һөйләмдәрҙә сикләү киҫәксәләре өҫтәп яҙыу.

1. Уҡытыусы _____мәктәптә эшләй.. 2.Ул балалар ___ уҡыта. 3.Инженер ____заводта эшләй. 4.Ул ____төрлө схемалар һыҙа. 5.Врач ____больницала эшләй. 6.Ул кешеләрҙе _____дауалай. 7.Төҙөүсе йорттар ____төҙөй. 8.Артист _____театрҙа уйнай. 9.Йырсы концертта _____ҡатнаша. 10.Ул төрлө йырҙар ____йырлай. 11.Летчик самолет ____йөрөтә. 12.Секретарь компьютерҙа ____баҫа.

Күнегеүҙе эшләү ысулы:

Һөйләмдәр таратып бирелә: киҫәксәләр өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға.

2. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә.

Баһалау:

"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Контроль эш №1. Тема: "Фонетика, лексика, киҫәксәләр."

Күнегеүҙәрҙе эшләү ваҡыты: 2 сәғәт.
Вариант 1.

1. **Һорау киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

1.Нина иртәгә практикаға бара....? 2.Улар күргәҙмәгә бара.....? 3.Артур беҙгә бөгөн килә...? 4.Һин миңә аҡса биреп тора алаһың....? 5.Төркөм менән фотоға төшәһең.....? 6.Минең менән дискотекаға бараһың....? 7.Бөгөн көн болотло....?

2. **Сикләү киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Мин ____ иртәнсәк тәбейә ашаным, колбаса, сырҙан эшләнгән бутерброд менән сәй эстем. Төшкө ашҡа ____ колледж ашханаһына барам. Миңә унда ашау оҡшай, сөнки беҙҙең ашнаҡсылар _____ бик тәмле әҙерләй.

3. **Көсәйтеү киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Ильяс ___ эшкә килде. Саматовтар ___ Мәскәүгә китте. Ильясовтарҙың ___ ғаиләһе ауылға ҡунаҡҡа китте. Атайымдар ___ эшкә иртә китте. Артур ___ подъезға инеп китте. Әсәйем ___ эшкә китеп бара.

4. **Көсәйтеү һәм сикләү киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Бөгөн ___ иртәнсәк поликлиникаға барҙым. Кисә мин ___ дуҫтарым менән компьютер класына барҙым. Ял көнө беҙ ___ дачаға барҙыҡ. Былтыр ___ беҙ Төркиәгә барҙыҡ.

5. **Йәйәләрҙе асып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Хәрәкәтләнеү организмдың ҡартайыуын (тотҡарлау). Азаттың теше (һыҙлау). Айгөлдөң ҡапыл ғына башы әйләнеп (китеү), күҙ алды (ҡараңғыланыу), быуындары (йомшарыу).

6. **Йәйәләрҙе асып, ҡылымдарҙы билдәле үткән заманға ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Мин ҡыяр, помидорҙан салат (эшләү). Улар баҙарҙан алма, хөрмә, груша (һатып алыу). Ауыл хужалығы техникумы студенттары тәжрибә баҡсаһында төрлө еләк-емеш (үҫтереү). Беҙ ҡышҡылыҡҡа йәшелсә салаттары (әҙерләү).
Вариант 2.

1. **Һорау киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

1.Нина иртәгә практикаға бара....? 2.Улар күргәҙмәгә бара.....? 3.Артур беҙгә бөгөн килә...? 4.Һин миңә аҡса биреп тора алаһың....? 5.Төркөм менән фотоға төшәһең.....? 6.Минең менән дискотекаға бараһың....? 7.Бөгөн көн болотло....?

2. **Сикләү киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Ғәҙәттә, мин __ йәшелсә салаты, аш, ҡурылған балыҡ йә бәрәй төрлө бутҡа, һут йәки компот алам. Бөгөн кискә мине ___ ҡунаҡҡа саҡырҙылар, нимә менән һыйларҙар, белмәйем. Әсәйем төрлө еләк-емештән ___ ҡайнатма ҡайнатты.

3. **Көсәйтеү киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Айнур ___ залға инде. Беҙ ___ өйгә индек. Инна ___ магазинға инеп китте. Катя менән Сәлимә театрҙан __ сыҡты. Галина Петровна __ метронан сыҡты. Ильяс ___ эшкә килде.

4. **Көсәйтеү һәм сикләү киҫәксәләре өҫтәп, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Йәйгеһен катя менән Кәримә Ташкентҡа ____ барҙы. Минең апайым ____ августа туристик путевка менән Болгарияға барҙы. Кисә кискеһен атайым менән әсәйем ҡунаҡҡа ___ барҙы.

5. **Йәйәләрҙе асып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Беҙҙең төркөмдә бер нисә студент грипп менән (ауырыу). Кисә олатайыма врач (саҡырыу). Артур катокта уң аяғын (һындырыу). Хәҙерге заманда йөрәк-ҡан системаһы ауырыуҙары йәш кешеләрҙә йыш (осрау).

6. **Йәйәләрҙе асып, ҡылымдарҙы билдәле үткән заманға ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ:**

Беҙ ҡышҡылыҡҡа йәшелсә салаттары (әҙерләү). Өләсәйем алма ҡағы (ҡойоу). Әсәйем төрлө еләк-емештән ҡайнатма (ҡайнатыу). Әсәйемдең тыуған көнөнә еләк-емеш салаты (эшләү).

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Үҙ аллы эш №1 Тема: “З.Биишева шағирә һәм яҙыусы”биографияһы менән танышыу һәм шиғырҙарын тасури укыу, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы билдәләү.

Шиғыр өҫтөндә эшләү шарттары:
1.З.Биишеваның биаграфияһы менән танышып, һорауҙарға яуап бирелә;
2.Яҙыусының булган китаптары менән танышып, әҫәрҙәрен анализлау;
3.“Башҡорт теле” шиғырын анализлау һәм яҙма эште эшләү.

**Башҡорт теле**

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!
Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсneңдәй йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!
Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем – тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем – гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем – бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле!
Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!
Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле – минең телем!
Зәйнәб Биишева.

## Үҙ аллы эш №2 Тема: “Тау башында балҡый бер ҡала.” Өфө ҡалаһы тураһында инша яҙыу.

Инша яҙыу шарттары:
1.Иншаның темаһы ныҡлап өйрәнелә, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә;
2.Библиотекала булган китаптар, журналдар ҡулланып, һөйләмдәр төҙәлә;
3.Йыйылған материалдарҙы ҡулланып “Тау башында балҡый бер ҡала” темаһына хикәйә яҙыла;
4.Әҙерләнгән эш буйынса төркөм алдында сығыш яһау.
Баһалау:
Иншаның төҙәлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:

- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

## II бүлек. Һүҙ төркөмдәре (ҡылым, рәүеш).

## Практик эш №4 Тема: һөйләмдәрҙән ҡылымдарҙы табып, бойороҡ һөйкәлешендә яҙыу.

1. **Түбәндәге ҡылымдарҙың заманын билдәләгеҙ һәм бойороҡ һөйкәлешендә яҙығыҙ.**

Барҙы,барған,барыр,ҡайтты,ҡайтҡан,ҡайтыр, килде, килгән, килер, уҡыр, йүгерҙе, һөрә, эшләне, килә, оҙата, өйрәтте, уҡый, оҙатты, уҡыны, йүгерә, һөрҙө, йүгерер, өйрәтә, һөрөр, бара, эшләр, килде, оҙатыр, барҙы, эшләй, килер, өйрәтер.

2. **Түбәндәге ҡылымдарҙы бойороҡ һөйкәлешендә үҙгәртегеҙ.**

Тор, төр, бар, кил, яҙ, ҡой, көт, ин, уҡы, төҙө, кит, ышан, кей, ярат, матурла.

3. **Һөйләмдәрҙе уҡып, бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдары табығыҙ.**

Ҡайғыр ҙа һин, ҡыуана ла бел. Кәрзинкә үрһендәр, балыҡ тотһондар. Яңы сорт иртә һәм тигеҙ өлгөрһөн. Эшлә, һора, бел, өйрән. Ғүмерегеҙҙең иң күңелле мәлдәре хаҡында уйларға тырышығыҙ. Күп бел, аҙ һөйлә. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ.

4. **Һөйләмдәрҙе уҡып, тәржемә итегеҙ, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ һәм заманын билдәләгеҙ.**

Аҡ торбанан да ҡара төтөн сыға. Ҡара тауыҡ та аҡ йомортҡа һала. Бер һүҙ меңде үлтерә. Оҙаҡламай көтөү ҡайтасаҡ. Ҡалған эшкә ҡар яуыр. Ҡарттың бик шәп бер аты булған. Ул иплəп кенә өйҙән сыҡты. Ауылда дүрт юл ҡушыла. Лилиә кисә еләккә барҙы. Сания апай улына хат яҙған.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Практик эш №5 Тема: теләк һөйкәлешендәге ҡылымдарҙы күсереп яҙыу.

1. **Түбәндәге ҡылымдарҙы теләк һөйкәлешендә үҙгәртегеҙ.**

Тор, төр, бар, кил, яҙ, ҡой, көт, ин, уҡы, төҙө, кит, ышан, кей, ярат, матурла.

2. **Һөйләмдәрҙе уҡып, теләк һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ, затын, һанын билдәләгеҙ.**

Әсәйемә матур-матур һүҙҙәр әйткем килә. Уның ғәфү үтенгеһе килде. Үҙ күҙҙәрем менән күргем килде. Ситкә китеп яңыса уҡығы килде. Арып бөттөләр, ашағылары килде. Әҙәмсә ял иткебеҙ килә. Һинең киноға барғың киләме? Һеҙҙең ҡайтҡығыҙ килә, ахыры.

3. **Һөйләмдәрҙе уҡып, тәржемә итегеҙ, хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ һәм заманын билдәләгеҙ.**

Аҡ торбанан да ҡара төтөн сыға. Ҡара тауыҡ та аҡ йомортҡа һала. Бер һүҙ меңде үлтерә. Оҙаҡламай көтөү ҡайтасаҡ. Ҡалған эшкә ҡар яуыр. Ҡарттың бик шәп бер аты булған. Ул иплəп кенә өйҙән сыҡты. Ауылда дүрт юл ҡушыла. Лилиә кисә еләккә барҙы. Сания апай улына хат яҙған.

4. **Һөйләмдәрҙе уҡып, шарт һөйкәлеше ҡылымдарын табығыҙ, затын, һанын билдәләгеҙ.**

Дуҫың булһа, һаҡла. Саҡырһалар, барырбыҙ. Ҡанаттарым булһа, осор инем. Үҙебеҙҙе яҡлай алмаһаҡ, беҙ ниндәй халыҡ! Кешене белгең килһә, ҡылығына ҡара; баланы белгең килһә, уйынына ҡара. Батыр үҙе үлһә лә, даны үлмәй. Ат ысҡынһа, тотоп була; һүҙ ысҡынһа, тотоп булмай.

Гөл булһам, үҫер инем,

Ел булһам, иҫер инем.

Алма булһам, алдарыңа

Өҙөлөп төшөр инем.

Р.Ханнанов.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Практик эш №6 Тема: “Мин студент” темаһы буйынса һорауҙарға яуап биреү.**

Фонетика

1. Башҡорт алфавиты нисә хәрефтән тора:
   а) 32 хәрефтән
   б) 38 хәрефтән
   в) 40 хәрефтән
   г) 41 хәрефтән
   ғ) 42 хәрефтән
2. Ҡайһы рәттә һуҙынҡы өндәр генә бирелгән:
   а) а,о,у,ы,ө,э,я,ә,е
   б) а,о,у,ы,е,ю,ү,ә,и
   в) а,о,у,и,ы,я,ү,е,ө
   г) а,о,ә,ө,и,ү,э,у,ы
3. Ҡайһы рәттәге хәрефтәр икешәр өндө белдерә?
   а) е,ю,я,а,и
   б) е,ё,ю,я
   в) а,ә,э,и,о,ө,ү,у,ы
4. Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.
   а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
   б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
   в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г
   г) Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәт юҡ.
5. Яңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.
   а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
   б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
   в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г
6. Хәреф һаны өн һаны менән тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ.
   а) егерме
   б) таяҡ
   в) юрған
   г) янъялсы
   ғ) ашъяулыҡ
7. <u>Яҡын</u>, <u>юлаҡ</u> һүҙҙәрендә дүрт хәреф, ә нисәшәр өн бар?
   а) өсәр өн
   б) дүртәр өн
   в) бишәр өн
   г) алтышар өн
   ғ) етешәр өн

8. Ҡарлуғас hүҙендә тартынҡы өндәр ҡайһылары?
   а) 1,3,5,7 - се өндәр
   б) 1,3,4,6,8 - се өндәр
   в) 2,5,7 - се өндәр
   г) бөтә өндәр ҙә тартынҡы
9. Һуҙынҡы өндән башланған hүҙҙе күрһәтегеҙ.
   а) яҙыусы
   б) тормош
   в) юлсы
   г) йылы
   ғ) әкиәт
10. Тартынҡы өндән башланған hүҙҙе күрһәтегеҙ
   а) үлән
   б) уҡыусы
   в) өй
   г) елән
   ғ) ағас
11. Асыҡ ижектән генә торған hүҙҙе күрһәтегеҙ.
   а) ҡайын
   б) бүлмә
   в) һөлдә
   г) ҡармаҡ
   ғ) ундай hүҙ юҡ
12. Юрматы hүҙендә нисә hуҙынҡы, нисә тартынҡы өн бар?
   а) өс hуҙынҡы, өс тартынҡы
   б) ике hуҙынҡы, дүрт тартынҡы
   в) дүрт тартынҡы, өс hуҙынҡы
13. В хәрефе ҡайһы юлда уы, уа тип уҡыла.
   а) вагон, вокзал, Иван
   б) Вәлимә, Вәкил, ватан, ваҡыт
   в) бер юлда ла hүҙҙәр уы, уа рәүешендә уҡылмай
14. Ябыҡ ижектәрҙән генә торған hүҙҙе күрһәтегеҙ.
   а) болот
   б) өҫтәл
   в) ҡылым
   г) карауат
   ғ) ундай hүҙ юҡ
15. Һандуғастар hүҙендә баҫым ҡайһы ижеккә төшә?
   а) тәүге ижеккә
   б) икенсе ижеккә
   в) өсөнсө ижеккә
   г) hуңғы ижеккә
16. Һорау киҫәксәhе булған hүҙҙәрҙә баҫым ҡайһы ижеккә төшә?
   а) беренсе ижеккә
   б) икенсе ижеккә
   в) hорау киҫәксәhе алдындағы ижеккә
   г) hуңғы ижеккә
   ғ) hорау киҫәксәhенә

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.
Дөрөҫ яуаптар

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1- | ғ | 5- | б | 9- | ғ | 13- | б |
| 2- | г | 6- | ғ | 10- | г | 14- | б |
| 3- | б | 7- | в | 11- | ғ | 15- | г |
| 4- | а | 8- | б | 12- | в | 16- | в |

## Практик эш №7 Тема: һөйләмдәрҙән хәл ҡылымдарҙы табып, күсереп яҙыу.

1. **Хәл ҡылымдарҙы табығыҙ.**

Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын. Үҙегеҙ теләгәнсә эшләгеҙ. Ҡатын-ҡыҙ ҡымыҙ яһап, киндер һуғып өйҙә йәшәй. Азат туйғансы йоҡлай, теләгәнсә ашай-эсә. Йыуынғас, кешегә оҡшап ҡалды. Хәлдәренән килгәнсә ҡәҙер-хөрмәт иттеләр. Бутҡаһын бешергәс, майын йәлләмә. Йырлай-йырлай еләк йыйҙылар.

2. **Һөйләмдәрҙә сифат ҡылымдарҙы табып, заманын билдәләгеҙ.**

Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә етә. Аҡыл менән йәшәүсенең минуты ла ҡәҙерле. Алаһы нәмә алтын булып күренә. Үлер ваҡыты етһә, себендең мороно үткерләнер. Йығылған ағасҡа балта менән сабыуы күп була. Ҡайтыусылар ҙа, ҡаршылаусылар ҙа күп. Күргәндәр күрмәмешкә, ишеткәндәр ишетмәмешкә, белгәндәр белмәмешкә һалышты. Йырланмаған йыр, һөйләнмәгән көләмәс ҡалманы. Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙы яҡлаусы булырға тейеш. Атҡан уҡ кире ҡайтмаҫ. Буласаҡ туй өсөн алдан бейей башлама. Үткән ғүмер – аҡҡан һыу. Ҡалған эшкә ҡар яуа. Йөрөгән таш шымара.

3. **Уртаҡ ҡылымдарҙы табығыҙ.**

Уҡырға, уҡырға һәм уҡырға! Аҡрынлап бесән сабырға, утын ярырға өйрәндем. Һалдаттар землянкалар ҡаҙырға, ҡорал таҙартырға тотондо. Урманға ялан аяҡ барырға ярамай. Һөрөргә, сәсергә, бесән сабырға, ураҡ урырға, ашлыҡ һуғырға көс кәрәк. Бөгөн һуңламаҫҡа!

4. **Исем ҡылымдарҙы табығыҙ.**

Көләү – кешенең оптимизмын раҫлаусы көс. Ишетеүҙән күреү яҡшы. Урманда һаҡ йөрөү яҡшыраҡ. Лилиә сигеү, тегеү, бәйләү өсөн да ваҡыт таба. Тәбиғәтте һаҡлау – үҙ-үҙеңде яҡлау ул.

5. **Тексты уҡырға, ҡылым төркөмсәләрен табырға.**

**Кәбеҫтә билмәне.**

Кәбеҫтәне ваҡ ҡына итеп турап, һуған ҡушып, майҙа ҡыҙҙырып алығыҙ. Сей йомортҡа ҡушылған тоҙло һыуҙа ҡамыр баҫығыҙ ҙа, йәйеп, шаҡмаҡлап киҫегеҙ. Һәр шаҡмаҡҡа ҡыҙҙырылған кәбеҫтә һалып, билмән яһағыҙ. Кәбеҫтә билмәнен ит һурпаһына һалып бешерәләр. Аҡ май, ҡаймаҡ, соус һалып, өҫтәлгә бирәләр.

Ярты кило кәбеҫтәгә ярты кило он, 1-2 баш һуған, үҫемлек майы, сама менән тоҙ, борос, бер йомортҡа алына.

“Йәншишмә” гәзитенән

Баһалау:

“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Практик эш №8 Тема: төшөм йүнәлешендәге ҡылымдарҙы күсереп яҙыу; хат яҙырға өйрәтеү.

*1.Һүҙлек диктанты*

Хат яҙыу, хат алышыу, аралашыу, аҡса күсереү, һоратып алыу, ебәреү, оҙатыу, тапшырыу, ҡотлау, шылтыратыу, һөйләшеү, ҡиммәтле, теркәлеү, махсус, шартлы билдә, интернет селтәре, ҡулланыусы исеме, почта йәшниге, мәғлүмәт

алышыу, тауыш файлдары, график иллюстрациялар, анимация роликтары, веб-биттәр, эҙләү системаһы, интернет сығанаҡтары, йөкмәтке, хәбәр ебәреү, элемтә.
*2.Һүҙбәйләнештәр төҙөргә:*

Интернет, тапшырыу, итеү, адрес, аша, селтәр, элемтә, электрон, хат, почта, ҡиммәтле, яҙыу, посылка, бүлек, ебәреү, телеграмма, хәбәр.
*3.Нөктәләр урынына һүҙҙәр ҡуйып яҙығыҙ:*

1.Мин өләсәйемдәргә .... яҙҙым. 2.Катя апаһынан .... алды. 3.Һинең ... почтаң бармы? 4.Интернетта бик күп социаль ... теркәлгән. 5.Һин миңә почта аша.... ебәр. 6.Ул һөйгәненә .... хәбәр ебәрҙе. 7.Почта аша .... ебәреү тыйыла. 8.Компьютер алдында ... ярамай. 9.Кеҫә телефоны аша .... инә. 10.Ғәлимәгә рәхмәт хаты .... . 11.Мин һиңә .... хат менән ебәрермен.
*4.Төшөм йүнәлешендәге ҡылымдарҙы күсереп яҙырға һәм ялғауҙарын билдәләргә:*

Компьютер вирустары.

Беренсе вирустар үткән быуаттың 60-сы йылдарында барлыҡҡа килә. Йылдар үтеү менән ни эшләптер элекке сығанағы ҡороған һәм икенсе урындан – ҡая таш араһынан сыға башлаған. Шунан ул, “Йырсы шишмә” исемен юғалтып, “Тау шишмәһе” генә булып ҡалған.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Практик эш №9 Тема: йөкмәтеү йүнәлешендәге ҡылымдарҙы күсереп яҙыу.

*1. Һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға, йөкмәтеү йүнәлешендәге ҡылымдарҙы табып, аҫтына һыҙырға:*

1.Тымаулаһаң, эҫе итеп мунса яҡтыр, ике миндек парлат. 2.Һин нығыраҡ эшләт. 3.-Лейтенант Шәрипов төркөмөн хәҙер үк разведкаға ебәрегеҙ, - тине Иван Ивановичҡа ҡарап. 4.Мә, айран эсер үҙенә. 5.”Мин ҡайтыуға, ошо егеткә ҡыҙыбыҙҙы биреп, кейәү итеп ҡуй”, - тип яңы хат яҙған. 6.Һәр берегеҙ тирә-яҡҡа, күршеләргә хәбәр итеп, Һабрау сәсәнде һаҡлау кәрәклеген еткерһен.

2. *Һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға, йөкмәтеү йүнәлешендәге ҡылымдарҙы табып, аҫтына һыҙырға:*

- Семсер, Янбай! – тине, егеттәргә өндәшеп. – Ике күҙемдең ҡараһы – һеҙ. Китегеҙ бынан, бүтән ярҙам кәрәкмәй миңә. Бынау тауҙар аръяғында тағы тауҙар бар. Унда бөрйән атлы боронғо башҡорт ырыыуҙары йәшәй икән. Шунда барығыҙ. Һабрау сәсәнде эҙләп табығыҙ. Ғәйебемде кисерһен… Ҡыуандыҡтан отҡан йырҙарыңды ла, һөнәреңде лә ташлама, Янбай. Онотма уны. Ҡуржыңды ал. Үҙең ске, дәрт иткән йәштәргә өйрәт… Атайымдың көтөүенән ике баш йылҡы ҡороҡла. Беренһен эйәрләп мен, икенсеһен етәккә ал

*Семсер - ҡылыс (сабля, меч)*
*Ҡороҡлау - ҡороҡ һалыу (набрасывать лассо)*
*Ҡуржын ҡаҙаҡ ир-егет исеме*
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Практик эш №10 Тема: рәүештәрҙе күсереп яҙыу, күнегеүҙәр эшләү.

*1. Ҡылымдарҙы кәрәкле заманға ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға, рәүештәрҙе табып, аҫтына һыҙырға:*

Беҙҙең өй янында ҙур баҡса (есть). Яҙғыһын беҙ унда төрлө йәшелсә-емештәр (посадить). Күмәкләп картуф (посадить). Әсәйем унда күп итеп помидор, кәбеҫтә (посадить). Ҡыяр, борсаҡ, редис, һуған (сеять). Еләк түтәле лә (есть). Беҙ уларға көн дә (поливать), уларҙың тупрағын (рыхлить), (полоть).

Көҙ (прийти). Көҙ күп уңыш (собирать). Беҙ бик (обрадоваться), сөнки мул уңыш өсөн бөтәбеҙ ҙә (стараться).

*2. Рәүештәрҙе күсереп яҙырға:*

Боронғо заманда башҡорттар яҙлауға сыҡҡан. Ырыу-ырыу булып урынлашҡан улар. Малдары күп булған, киң көтөүлектәр биләгәндәр. Уларға тирә-яҡҡан дошмандар йыш һөжәм иткән, малдарын ҡыуып алып киткеләгәндәр. Шуның өсөн күрше ырыуҙар бер-береһенә Ҡарауыл тауы башында усаҡ тоҡандырып, хәбәр иткән.

Баһалау:

“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Контроль эш №2. Тема: һүҙ төркөмдәре (исем, ҡылым, сифат)**

Күнегеүҙе үтәү ваҡыты: 2 сәғәт

1. Йәйә эсендәге ҡылымдарҙы, үткән замандағы сифат ҡылымдар менән алмаштырып, һүҙбәйләнештәрҙе күсереп яҙығыҙ:

Ҡалала студент (уҡый), заводта эшсе (эшләй), өҫтәлдә көҙгө (тора), урамда бала (уйнап йөрөй), оҫта өй (эшләшә), армиянан егеттәр (ҡайта), көндәр тиҙ (үтә), профессия (ярата).

2. Бирелгән ҡылымдарҙы үткәнзаман сифат ҡылымға әйләндереп күсереп яҙығыҙ:

Иреү, килеү, көлөү, сәсеү, тейеү, ышаныу, кереү, инеү, уҡыу, биреү, йәшәү, йөрөү, күреү, эшләү, китеү, ҡайтыу, осрау, булыу.

3. Бирелгән һүҙҙәргә киләсәк заман ялғауҙарын ҡушып яҙырға:

Бар/ырға (юл), уҡы/рға (журнал), йүнәт/ергә (диван), яҙ/ырға (конспект), киптер/ергә (үлән), шылтырат/ырға (курсташ), ал/ырға (аҡса), бир/ергә аҡса.

4. Бирелгән һүҙҙәргә үткән заман ялғауҙарын ҡушып яҙырға:

Бар/ырға (юл), уҡы/рға (журнал), йүнәт/ергә (диван), яҙ/ырға (конспект), киптер/ергә (үлән), шылтырат/ырға (курсташ), ал/ырға (аҡса), бир/ергә аҡса.

5. Бирелгән һүҙҙәргә исем заман ялғауҙарын ҡушып яҙырға:

Бар, уҡы, йүнәт, яҙ, киптер, шылтырат, ал, бир, кил, көл, йәшә.

6. Бирелгән һүҙҙәргә сифат ҡылымдың хәҙерге заман ялғауҙарын ҡушып яҙырға:

Бар, уҡы, йүнәт, яҙ, киптер, шылтырат, ал, бир, кил, көл, йәшә.

7. Бирелгән ҡылымдарҙан хәл ҡылым яһап, күсереп яҙығыҙ - -п, -ып, -еп, -оп, -өп: Бар, уҡы, йүнәт, яҙ, киптер, шылтырат, ал, бир, кил, көл, йәшә.

Баһалау:

“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).

“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).

“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)

“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Үҙ аллы эш №3 Тема: “Белем”,”Туған тел” темаларына мәкәлдәр яҙыу; һүрәттәр яһау.**

**Үҙ аллы эш №4 Тема: “Уҡыусылар”, “Белем”, темаларына көләмәстәр яҙыу; һүрәттәр яһау; йомаҡтар йыйыу.**

Күнегеүҙе эшләү ысулы:

1.Әңгәмә үткәреү: нимә ул мәҡәл, йомаҡ, көләмәс?

2.Газета-журналдар, китаптар менән таныштырыу, анализлау.

3.Һәр уҡыусыға 5-әр мәҡәл, йомаҡ, көләмәс яҙырға.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Үҙ аллы эш №5 Тема: “Рәссамдар” тураһында мәғлүмәттәр әҙерләргә (доклад)**

Доклад – телдән йәки яҙма рәүештә бирелгән темаға мәғлүмәт еткереү.
Доклад әҙерләүҙең шарттары:
1. Бирелгән теманы ныҡлап өйрәнеп, анларға, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә.
2. Кәрәкле урындарҙы билдәләп, яҙып алына.
3. Доклад яҙыу буйынса план төҙөлә.
4. Йыйылған материалдарҙы туплап, доклад яҙыла.
5. Әҙер эште уҡыу, анализлау, дөрөҫләү.
6. Ҡағиҙә буйынса яҙма эште тәртипкә килтереү.

Доклад (реферат) яҙыуҙың яҡынса структураһы:
1.Титуль бите.
2.Эштең яҙмаһы.
3.Ҡулланылған әҙәбиәт.

**Доклад (реферат) темалары:**

1. “М.Аҡмулла сәсән һәм шағир”.
2. “С.Юлаев башҡорт халҡының милли геройы”.
3. “Башҡортостан”.
4. “Минең буласаҡ һөнәрем”.
5. “Минең яратҡан яҙыусым”.
6. “Бөйөк кешеләр”.
7. “Спортсмендар”,”Спорт уйындары”.

Баһалау:
Доклад (реферат) төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:
- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

**Үҙ аллы эш №9 Тема: “Көн режимы” темаһына таблица төҙөү.**

Күнегеүҙе эшләү ысулы:
1.Әңгәмә үткәреү: нимә ул көн режимы?
2.Газета-журналдар, китаптар менән таныштырыу, анализлау.
3.Һәр уҡыусыға “Минең бер көнөм” темаһына таблица төҙөргә бирелә.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## III бүлек. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе ҡабатлау һәм нығытыу.

**Практик эш №11 Тема: текстан синонимдарҙы күсереп яҙыу;**

*1.Синонимдарҙы ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға:*

Минең олатайым (ҡартатайым) – үҙенсәлекле шәхес. Ул инде оло (ҙур) кеше. Үҙе бик белемле (уҡымышлы, ғилемле), йыуаш (баҫалҡы). Берәүгә лә тауыш

күтәреп (ҡысҡырып, аҡырып, баҡырып) бармай. Яратҡан (күңеленә ятҡан) шөғөлө – төрлө илдәргә сәйәхәт итеү (илдәр гиҙеү).
Ҡайҙа ғыны булмаған ул! Уның эш кабинеты – торғаны бер музей. Төрлө илдәрҙән алып ҡайтылған (килтерелгән) сувенирҙар, китаптар…
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Практик эш №12 Тема: текстарҙан антонимдарҙы күсереп яҙыу.**

*1.Антонимдар аҫтына һыҙырға:*

1.Батыр бер үлә, ҡурҡаҡ мең үлә. 2.Яңы туным бар тип, иҫкеһен утка яҡма. 3.Иртәнге ашты ташлама, кискеһен башлама. 4.Астан ҡаҙан аҫтырма, туҡтан туҡмас баҫтырма. 5.Берәүҙең яңыһынан үҙеңдең иҫкең яҡшы. 6.Йәйен аҡтан кейен, ҡышын ҡаранан кейен. 7.Аҙ һөйлә, күп эшлә. 8.Уҡыған – уҙыр, уҡымаған - туҙыр.

*2. Антонимдарҙы ҡулланып, һөйләмдәрҙе тулыландырып яҙырға:*

1.Был ….. автобус. 2.Был минең …… компьютер. 3.Минең коллегам бигерәк ….. кеше. 4.Был магазин ….. . 5.Минең дуҫым бигерәк ….. . 6.Беҙҙең өй ….. . 7. …. юлдан бар, …. юлдан барма.
Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

**Практик эш №13 Тема: “Дауаханала. Табипта” диалог төҙөү.**

*1. Хәрефтәр һәм өндәр һаны тура килгән һүҙҙәрҙе билдәләргә:*
бирьяҡ, умырзая, таяныс, ерек, донъя, юлсы, шаян, кейек.
*2. Нәҙек һуҙынҡынан ғына торған һүҙҙәрҙе билдәләргә:*
Диңгеҙ, ҡағыҙ, әфлисун, көйәнтә, китап, туҡыма, өҫтәл, ғалим.
*3. Хатаһыҙ яҙылған һүҙҙәр төркөмөн билдәләргә:*
1)Ҡойроғо,ҡаймаҡы,мәктәве
2)Яулығы,тарағы,китабы
3)Бүләге,орлоғы,ҡавы
*4.Баш киҫәктәре дөрөҫ билдәләнгән һөйләмдәрҙе табырға:*
1)Ҡая башында ҡайын үҫә.
2)Зәңгәр күктә ҡояш йылмая.
3)Зилә ял көнө әхирәтенә ҡунаҡҡа барҙы.
4)Малайҙар урманда көҙгө япраҡтар йыйҙылар.
5)Тау баштарына,ағастарға  тәүге ҡар яуҙы.
6)Терпе энәһенә бер-нисә алма ҡаҙаған.
*5. Ярҙамсы һүҙҙәр генә яҙылған төркөмдө билдәләргә:*
1)Урман(да) йәшәй, еләк(тә)йыйҙы,ай(ҙа)бөттө
2)Баҡса(ла )йөрөй ,тау(ҙа) үҫә ,ҡыҙҙар(ҙа) килде
3)Йәй( ҙә) үтте,күл(дә) ҡороно,эш(тә) тамамланды
*6. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе генә билдәләргә:*
Йыр, йырлай, йыраҡ, йырсы, йырғанаҡ, йырһыҙ, йырыҡ.
*7. Һыҙыкса аша яҙылыусы ҡушма һүҙҙәрҙе билдәләргә:*
Көн+байыш ер+ һыу дүрт+мөйөш уйнай+ уйнай, тирә+яҡ, төн+ яҡ, Аҡ+ бай, ал+ япҡыс.

*8.Кәрәкле ялғауҙың аҫтына һыҙырға:*
Борос(-тоң,-тың),ҡолон(-дың,-доң),мөйөш(-төң,тең),өлгө(-нөң,нең)
*9.Мәғәнәләре бер үк булған һүҙҙәрҙе дөрөҫ табып ,тоташтырырға:*
Асығыу, маҡтаныу, ҡурҡыу, шатланыу, ҡото осоу, ҡорһағы асыу, түбәһе күккә тейеү, ҡабыҡ ҡағыу.
*10.Омонимдарҙы табып, мәғәнәләрен аңлатырға.*
Нурый күреп минең яңы эйәрҙе,
Бер аҙым да арттан ҡалмай эйәрҙе.
*11. Бирелгән өлгө буйынса, диалог төҙөргә.*
-Миңә теш врачына күренергә ине.
-Адресығыҙ, фамилияғыҙ?
-Минең карточкам юҡ. Мин һеҙҙә беренсе тапҡыр.
-Улай булғас, карточка тултырайыҡ.
-Фамилияғыҙ, исемегеҙ, тыуған йылығыҙ?
-Бакиров Рөстәм Салауат улы, бер мең туғыҙ йөҙ һикһән бишенсе йылғы.
-Ҡайҙа уҡыйһың?
-Авиация техникумда.
-Өй адресығыҙ?
-Салауат Юлаев урамы, 7-се йорт, 93-сө фатир.
-Булды. Врачҡа талон ал. Беренсе ҡат, йөҙ ҙә ун икенсе кабинетҡа үт.
*<u>Яуаптарҙы баһалау:</u>*
1.Дөрөҫ яуап- бирьяҡ,донъя,кейек
2балл-кәрәкле 3 һүҙ билдәләнгән,башҡа һүҙҙәр билдәләнмәгән;
1балл- кәрәкле1 һүҙ билдәләнмәгән йәки1 артыҡ һүҙ билдәләнгән;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
2.Дөрөҫ яуап-диңгеҙ,өҫтәл,көйәнтә.
2балл –кәрәкле3 һүҙ билдәләнгән,башҡа һүҙҙәр билдәләнмәгән;
1балл-кәрәкле 1һүҙбилдәләнмәгән йәки1 артыҡ һүҙ билдәләнгән
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
3.Дөрөҫ яуап-2)
1балл-дөрөҫ яуап һайланған;
0балл-яуап дөрөҫ һайланмаған;
4.Дөрөҫ яуап-2)5)6)
2балл-3һөйләм дә дөрөҫ билдәләнгән,башҡа һөйләмдәр билдәләнмәгән;
1балл-3һөйләмдең икеһе дөрөҫ билдәләнгән йәки башҡа һөйләмдәр билдәләнмәгән;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
5.Дөрөҫ яуап-3)
2балл-дөрөҫ яуап һайланған;
0балл-яуап дөрөҫ һайланмаған;
6.Дөрөҫ яуап-йыр, йырсы, йырһыҙ ,йырлай
2балл-4һүҙ дөрөҫ билдәләнгән,башҡа һүҙҙәр билдәләнмәгән;
1балл-3һүҙ дөрөҫ билдәләнгән йәки1артыҡ һүҙ билдәләнгән;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
7.Дөрөҫ яуап:ер-һыу,тирә-яҡ,уйнай-уйнай
2балл-3кәрәкле һүҙ билдәләнгән,башҡа һүҙҙәр билдәләнмәгән;
1балл-1кәрәкле һүҙ билдәләнмәгән йәки артыҡ һүҙ билдәләнгән;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
8.Дөрөҫ яуап-боростоң,ҡолондоң,мөйөштөң,өлгөнөң
2балл-4һүҙгә ялғау дөрөҫ ҡушылған;

1балл-3һүҙгә ялғау дөрөҫ ҡушылған;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
9.Дөрөҫ яуап- Асығыу, маҡтаныу, ҡурҡыу, шатланыу
Ҡото осоу, ҡорһағы асыу, түбәһе күккә тейеү, ҡабыҡ ҡағыу
2балл- мәғәнәләре бер үк һүҙҙәр дөрөҫ табылған;
1балл-1һүҙҙең мәғәнәһе дөрөҫ билдәләнмәгән;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;
10.Дөрөҫ яуап-эйәрҙе-атта һыбай йөрөү өсөн ҡулайлама, эйәрҙе-артынан барҙы;
2балл-һүҙҙәрҙең мәғәнәһе дөрөҫ аңлатылған;
1балл-1 һүҙҙең мәғәнәһе дөрөҫ аңлатылған;
0балл-эш дөрөҫ үтәлмәгән;

## Практик эш №14 Тема: "Һөнәрҙәр" текстан эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе яҙыу.

*1. Һорауҙарға яуап бирергә:*

1.Һеҙ ниндәй профессиялар беләһегеҙ?
2. Һеҙ буласаҡ профессияғыҙҙы һайланығыҙмы? Ул нисек атала?
3. Үҙегеҙҙе буласаҡ профессияғыҙға яҡшы әҙерләү өсөн ниҙәр эшләйһегеҙ?
4. Һеҙҙеңсә, һеҙ һайлаған профессия кешеһе ниндәй булырға тейеш? Уға ниндәй төп сифаттар хас?
5. Һеҙҙә ул сифаттарҙың ҡайһыһы бар? Ниндәйҙәрен булдырырға тырышаһығыҙ?

*2. Һөйләмдәрҙе тәржемә итергә:*

1.Минең атайым автобус водителе. 2.Мараттың ағаһы теплоход капитаны. 3.Андрей пассажирҙар самолеты бортинженеры. 4.Павел тимер юлы депоһы машинисы. 5.Өфөлә пассажирҙарҙы "ГАЗель", "НеФАЗ", "Мерседес", "ПАЗ" маркалы автобустар ташый. 6.Башҡортостандың иң ҙур теплоходтары "Салауат Юлаев" һәм "Мулланур Вахитов". 7.Өфө аэропорты паркында йөҙҙән ашыу самолет иҫәпләнә. 8.Өфө тимер юл вокзалы бинаһы бик матур.

Баһалау:
"5"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
"4"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
"3"-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
"2"-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

Ҡулланылған әҙәбиәт:
1.М.Ғ.Усманова, З.З.Солтанғолова Башҡорт теле –Өфө:Китап, 2008;
2.З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле (Iкурс) - Өфө:Китап, 2009.
3.Усманова М.Г. Башкирско-русский и русско-башкирский словарь. – 2010.

## Үҙ аллы эш №10 Тема: "Музыка ҡоралдары" темаһына һүрәттәр яһау, мәғлүмәттәр әҙерләү, темаһына реферат яҙыу

## Үҙ аллы эш №12 Тема: "Минең яратҡан яҙыусым", "Минең яратҡан шағирым" темаларына реферат яҙыу

Реферат – телдән йәки яҙма рәүештә бирелгән темаға мәғлүмәт еткереү.
Реферат яҙыу шарттары:
1. Бирелгән теманы ныҡлап өйрәнеп, анларға, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә.
2. Кәрәкле урындарҙы билдәләп, яҙып алына.
3. Реферат яҙыу буйынса план төҙөлә.
4. Йыйылған материалдарҙы туплап, реферат яҙыла.
5. Әҙер эште уҡыу, анализлау, дөрөҫләү.
6. Ҡағиҙә буйынса яҙма эште тәртипкә килтереү.

Реферат яҙыуҙың яҡынса структураһы:
1.Титуль бите.
2.Эштең яҙмаһы.
3.Ҡулланылған әҙәбиәт.

Баһалау:
Реферат төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:

- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

**Үҙ аллы эш №11 Тема: “Минең яратҡан миҙгелем” темаһына инша яҙыу.**

Инша – яҙма рәүештә бирелгән темаға мәғлүмәт еткереү.
Инша яҙыу шарттары:
1. Бирелгән теманы ныҡлап өйрәнеп, анларға, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә.
2. Кәрәкле урындарҙы билдәләп, яҙып алына.
3. Инша яҙыу буйынса план төҙөлә.
4. Йыйылған материалдарҙы туплап, инша яҙыла.
5. Әҙер эште уҡыу, анализлау, дөрөҫләү.
6. Ҡағиҙә буйынса яҙма эште тәртипкә килтереү.

Инша яҙыуҙың яҡынса планы:
1.Тема буйынса һөйләмдәр төҙөү.
2.Эште яҙыу.
3.Яҙылғанды тикшереү.
4.Ҡулланылған әҙәбиәт.

Баһалау:
Инша төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:

- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

Шулай уҡ үтелгән темалар буйынса грамматик хаталар ҙа иҫәпкә алына.

**Контроль эш №3. Тема:фонетика, һүҙ төркөмдәре, ярҙамсы һүҙҙәр, һөйләм.**

Вариант 1.

1. Башҡорт алфавиты **нисә хәрефтән тора:**
   а) 32 хәрефтән
   б) 38 хәрефтән
   в) 40 хәрефтән
   г) 41 хәрефтән
   ғ) 42 хәрефтән

**2. Ҡайһы рәттә һуҙынҡы өндәр генә бирелгән:**
   а) а,о,у,ы,ө,э,я,ә,е
   б) а,о,у,ы,е,ю,ү,ә,и
   в) а,о,у,и,ы,я,ү,е,ө
   г) а,о,ә,ө,и,ү,э,у,ы

**3. Ҡайһы рәттәге хәрефтәр икешәр өндө белдерә?**
   а) е,ю,я,а,и
   б) е,ё,ю,я
   в) а,ә,э,и,о,ө,ү,у,ы

4. **Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.**
   а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
   б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
   в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г
   г) Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәт юҡ.

5. **Яңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.**
   а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ

б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г

6. **Хәреф һаны өн һаны менән тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) егерме
б) таяҡ
в) юрған
г) ашъяулыҡ

7. **<u>Яҙ</u>, <u>юл</u> һүҙҙәрендә ике хәреф, ә нисәшәр өн бар?**
а) өсәр өн
б) дүртәр өн
в) бишәр өн
г) алтышар өн
ғ) етешәр өн

8. **<u>Ҡарлуғас</u> һүҙендә тартынҡы өндәр ҡайһылары?**
а) 1,3,5,7 - се өндәр
б) 1,3,4,6,8 - се өндәр
в) 2,5,7 - се өндәр
г) бөтә өндәр ҙә тартынҡы

9. **Һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) яҙыусы
б) тормош
в) юлсы
г) йылы
ғ) әкиәт

10. **Тартынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) үлән
б) уҡыусы
в) өй
г) елән
ғ) ағас

11. **Асыҡ ижектән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) ҡайын
б) бүлмә
в) ҡармаҡ
г) ундай һүҙ юҡ

**12. <u>Юрматы</u> һүҙендә нисә һуҙынҡы, нисә тартынҡы өн бар?**
а) өс һуҙынҡы, өс тартынҡы
б) ике һуҙынҡы, дүрт тартынҡы
в) дүрт тартынҡы, өс һуҙынҡы

**13. Ябыҡ ижектәрҙән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) болот
б) өҫтәл
в) ҡылым
г) караүат
ғ) ундай һүҙ юҡ

**14. Һандуғастар һүҙендә баҫым ҡайһы ижеккә төшә?**
а) тәүге ижеккә
б) икенсе ижеккә
в) өсөнсө ижеккә
г) дүртенсе ижеккә
ғ) һуңғы ижеккә

**15. Һорау киҫәксәһе булған һүҙҙәрҙә баҫым ҡайһы ижеккә төшә?**
а) беренсе ижеккә
б) икенсе ижеккә

в) һорау киҫәксәһе алдындағы ижеккә
г) һуңғы ижеккә
ғ) һорау киҫәксәһенә

**16. Предметтың иҫәбен, уның һаналыу тәртибен белдергән һүҙ нимә тип атала?**

а)һан
б) сифат
в)исем
г)ҡылым
ғ)рәүеш

**17. Бер, икешәр, ун биш һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**

а)сифат
б) һан
в)алмаш
г)ҡылым
ғ)рәүеш

1. **Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ һөйләмендә һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ.**

а)сама һаны
б)кәсер һаны
в)үлсәү һаны
г)йыйыу һаны
ғ)төп һан

2. **Сарбиямал… егерме биш – утыҙ йәштәр самаһындағы ҡатын ине (З.Биишева) һөйләмендә һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ**

а)төп һан
б)рәт һаны
в)бүлем һаны
г)сама һаны
ғ)йыйыу һаны

3. **Составында бүлем һаны булған һөйләмде табығыҙ.**

а) Егәрленең ҡулы - етәү. (Мәҡәл).
б) Бише эшләгәнсе, берҙе еренә еткер.(Мәҡәл).
в) Балаларға икешәр алма тура килде.
г) Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.

4. **Составында рәт һаны булған һөйләмде күрһәтегеҙ.**

а) Берәүҙән икәү яҡшы.
б) Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.
в) Мин икенсе булып килдем.
г) Сәғәт өстә дәрес бөтә.

5. **Ябай һанды табығыҙ.**

а) алтмыш ике
б) миллион
в) йөҙ ҙә биш
г) ун ике
ғ) ун ике
д) егерме биш

6. **Һәр төркөмдә алтышар уҡыусы бар. Һөйләмдә һанды табып, уның ниндәй төркөмсәгә ҡарағанын билдәләгеҙ.**

а)төп һан
б)бүлем һаны
в)сама һаны
г)тәртип һаны
ғ)йыйыу һаны

7. **<u>Уларҙың беренсеһенә, барыһынан да олораҡы Федяға, һеҙ ун дүрт йәш бирер инегеҙ (И.Тургенев).</u> һөйләмдә ниндәй төркөмсәгә ҡараған һандар бар?**

а)төп һан, бүлем һаны
б)рәт һаны, төп һан
в) бөтәһе лә йыйыу һаны
г)төп һан, сама һаны
ғ)сама һаны, бүлем һаны

**Вариант 2.**

**1. Башҡорт алфавиты нисә хәрефтән тора**

а) 42 хәрефтән
б) 38 хәрефтән
в) 40 хәрефтән
г) 41 хәрефтән
ғ) 32 хәрефтән

**2. Ҡайһы рәттә һуҙынҡы өндәр генә бирелгән:**

а) а,о,ә,ө,и,ү,э,у,ы
б) а,о,у,ы,е,ю,ү,ә,и
в) а,о,у,и,ы,я,ү,е,ө
г) а,о,у,ы,ө,э,я,ә,е

**3. Ҡайһы рәттәге хәрефтәр икешәр өндө белдерә?**

а) е,ю,я,а,и
б) а,ә,э,и,о,ө,ү,у,ы
в) е,ё,ю,я

4. **Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.**

а) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г
б) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
г) Һаңғырау тартынҡылар ғына булған рәт юҡ.

5. **Яңғырау тартынҡылар ғына булған рәтте күрһәтегеҙ.**

а) б,в,г,ғ,д,ҙ,ж,з,й,л,м,н,ң,р
б) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ
в) п,ф,к,ҡ,т,с,ҫ,ш,х,һ,ч,ц,щ,б,в,г

6. **Хәреф һаны өн һаны менән тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ.**

а) егерме
б) ҡулъяулыҡ
в) юрған
г) таяҡ

7. **<u>Яҙ</u>, <u>юл</u> һүҙҙәрендә ике хәреф, ә нисәшәр өн бар?**

а) алтышар өн
б) дүртәр өн
в) бишәр өн
г) өсәр өн
ғ) етешәр өн

8. **<u>Ҡарлуғас</u> һүҙендә тартынҡы өндәр ҡайһылары?**

а) 1,3,5,7 - се өндәр
б) бөтә өндәр ҙә тартынҡы
в) 2,5,7 - се өндәр
г) 1,3,4,6,8 - се өндәр

**9. Һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**

а) яҙыусы
б) әкиәт
в) юлсы

г) йылы
ғ) тормош

10. **Тартынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) үлән
б) елән
в) өй
г) уҡыусы
ғ) ағас

11. **Асыҡ ижектән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) ундай һүҙ юҡ
б) бүлмә
в) ҡармаҡ
г) ҡайын

**12. Юрматы һүҙендә нисә һуҙынҡы, нисә тартынҡы өн бар?**
а) дүрт тартынҡы, өс һуҙынҡы
б) ике һуҙынҡы, дүрт тартынҡы
в) өс һуҙынҡы, өс тартынҡы

**13. Ябыҡ ижектәрҙән генә торған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**
а) болот
б) карауат
в) ҡылым
г) өҫтәл
ғ) ундай һүҙ юҡ

**14. Һандуғастар һүҙендә баҫым ҡайһы ижеккә төшә?**
а) тәүге ижеккә
б) һуңғы ижеккә
в) өсөнсө ижеккә
г) дүртенсе ижеккә
ғ) икенсе ижеккә

**15. Һорау киҫәксәһе булған һүҙҙәрҙә баҫым ҡайһы ижеккә төшә?**
а) беренсе ижеккә
б) икенсе ижеккә
в) һуңғы ижеккә
г) һорау киҫәксәһе алдындағы ижеккә
ғ) һорау киҫәксәһенә

**16. Предметтың иҫәбен, уның һаналыу тәртибен белдергән һүҙ нимә тип атала?**
а) ҡылым
б) сифат
в)исем
г) һан
ғ)рәүеш

**17. Бер, икешәр, ун биш һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**
а)сифат
б) рәүеш
в)алмаш
г)ҡылым
ғ) һан

**18. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ һөйләмендә һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ.**
а)сама һаны
б)кәсер һаны
в)үлсәү һаны
г)йыйыу һаны

ғ)төп һан

19. **<u>Сарбиямал… егерме биш – утыҙ йәштәр самаһындағы ҡатын ине (З.Биишева)</u> һөйләмендә һанды табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ.**

а)төп һан
б) сама һаны
в)бүлем һаны
г) рәт һаны
ғ)йыйыу һаны

20. **Составында бүлем һаны булған һөйләмде табығыҙ.**

а) Егәрленең ҡулы - етәү. (Мәҡәл).
б) Биште эшләгәнсе, берҙе еренә еткер.(Мәҡәл).
в) Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ
г) Балаларға икешәр алма тура килде.

21. **Составында рәт һаны булған һөйләмде күрһәтегеҙ.**

а) Мин икенсе булып килдем.
б) Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ.
в) Берәүҙән икәү яҡшы.
г) Сәғәт өстә дәрес бөтә.

22. **Ябай һанды табығыҙ.**

а) алтмыш ике
б) егерме биш
в) йөҙ ҙә биш
г) ун ике
ғ) ун ике
д) миллион

23. **<u>Һәр төркөмдә алтышар уҡыусы бар.</u> Һөйләмдә һанды табып, уның ниндәй төркөмсәгә ҡарағанын билдәләгеҙ.**

а)төп һан
б) йыйыу һаны
в)сама һаны
г)тәртип һаны
ғ) бүлем һаны

24. **<u>Уларҙың беренсеһенә, барыһынан да олорағы Федяға, һеҙ ун дүрт йәш бирер инегеҙ (И.Тургенев).</u> һөйләмдә ниндәй төркөмсәгә ҡараған һандар бар?**

а)төп һан, бүлем һаны
б) сама һаны, бүлем һаны
в) бөтәһе лә йыйыу һаны
г)төп һан, сама һаны
ғ) рәт һаны, төп һан

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

Вариант1

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1-ғ | 6-г | 11-г | 16-а | 21-в |
| 2-г | 7-а | 12-в | 17-б | 22-б |
| 3-б | 8-б | 13-б | 18-ғ | 23-б |
| 4-а | 9-ғ | 14-ғ | 19-г | 24-б |
| 5-б | 10-г | 15-в | 20-в | |

Вариант 2

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1-а | 6-б | 11-а | 16-г | 21-а |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 2-а | 7-г | 12-а | 17-ғ | 22-д |
| 3-в | 8-г | 13-г | 18-ғ | 23-ғ |
| 4-в | 9-б | 14-б | 19-б | 24-ғ |
| 5-а | 10-б | 15-г | 20-г | |

## IV бүлек. Синтаксис һәм пунктуация.

## Контроль эш №4. Тема:фонетика, һүҙ төркөмдәре, ярҙамсы һүҙҙәр, һөйләм.

Эшләү ваҡыты: 2 сәғәт

**Вариант1.**

1. **Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйығыҙ:ә,ө,ү,ҙ,ғ,ҡ,һ.:** Ҡала., м.ктәп, балы., а.ай, а.бур, тәҙр., .ыйыр, у.ытыусы, ҡ.ләм, .ләсәй, баш.орт теле, мәҡ.л, д.рес, сәск., ҡы..
2. **Бирелгән һүҙҙәргә күплек ялғауҙарын яҙығыҙ:**

Дәрес, мәктәп, уҡыусы, китап, дәфтәр, ҡәләм, аҡбур, ҡала, сәскә, көндәлек, уҡытыусы, гөл, парта.

3. **Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ:**

12, 23, 103, 322, 1008, 2009. 688, 40, 500, 2029, 5000.

4. **Эйәлек заты ялғауҙарын яҙығыҙ I,II,III зат берлек һанда:**

Компьютер, машина, балыҡ, журналдар, ҡарғалар, йорт, быйма, атай, уҡытыусы, гөл, китап, әсәй.

5. **Һөйләмдәр төҙөгөҙ:**

Бик, Башҡортостан, ярата, мин.
Яҡшы, белә, республика.
Мин, район, төньяҡ, йәшәй.
Ямантау, бейек, иң, тау.
Ил, дуҫлыҡ, мин, йәшәй.

6. **Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, ҡылымдарҙың заманын һәм затын билдәләгеҙ:**

Лагерҙағы хушлашыу усағы мәңгегә хәтеремдә ҡалды.
Уға беҙ бер нисә көн элек әҙерләндек.
Байрамға бейеү, йыр өйрәнәбеҙ, карнавалға костюмдар эшләйбеҙ.
Көткән көн килеп етте.
Борғо тауышы яңғырай.
Уртаға бейек итеп утын өйөрһөң.
Ялҡын юғары үрләй, тирә-яҡ көндөҙгө кеүек яҡты булып китте.
Ул йырлай-йырлай килеп инде лә, мине ҡосаҡлап алды.
Беҙ оҙаҡ йырланыҡ.
Был көндәр бик оҙаҡҡа иҫтә ҡаласаҡ.

**Вариант2.**

**1. Нөктәләр урынына тейешле хәрефтәр ҡуйығыҙ:ә,ө,ү,ҙ,ғ,ҡ,һ.:**
Юр.ан, мәкт.п, .устым, а.ай, а.бур, тә.рә, .арыҡ, у.ыусы, ҡ.ләм, .ләсәй, ба.са, мәҡ.л, д.рес, .ар, .ул.
**2. Бирелгән һүҙҙәргә күплек ялғауҙарын яҙығыҙ:**
Баҡса, ҡала, ҡарға, малай, мәктәп, уҡыусы, дәфтәр, ҡәләм, аҡбур, сәскә, ағай, дуҫ, парта.
**3. Һандарҙы һүҙ менән яҙығыҙ:**
15, 26, 105, 332, 1007, 2009. 755, 50, 600, 2039, 6000.
**4. Эйәлек заты ялғауҙарын яҙығыҙ I,II,III зат берлек һанда:**
Принтер, машина, аяҡ, парта, турғайҙар, өй, итек, ағай, уҡыусы, сәскә, китап, апай, күҙҙәр.

**5. Һөйләмдәр төҙөгөҙ:**
1. Ҙур, Ағиҙел, йылға, иң, Башҡортостан.
2. Яҡшы, белә, тыуған яғым.
3. Мин, район, төньяҡ, йәшәй.
4. Ямантау, бейек, иң, тау.
5. Ҡала, матур, мин, йәшәй.

**6. Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, ҡылымдарҙың заманын һәм затын билдәләгеҙ:**
1) Оҙаҡламай ат сабыштыра башлаясаҡтар.
2) Уға беҙ бер нисә көн элек әҙерләндек.
3) Шул мәл улар янына Саптар килде.
4) Көткән көн килеп етте.
5) Борғо тауышы яңғырай.
6) Бына бөгөн күрерһең әле.
7) Ялҡын юғары үрләй, тирә-яҡ көндөҙгө кеүек яҡты булып китте.
8) Иҙәндә буй-буй биҙәкле асыҡ төҫтәге балаҫ ята.
9) Беҙ оҙаҡ барҙыҡ.
10) Был көндәр бик оҙаҡҡа иҫтә ҡаласаҡ.

Баһалау:
“5”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (1 хата ).
“4”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (2-3хата).
“3”-эш теүәл, хатаһыҙ үтәлгән (4-5хата)
“2”-5-тән артыҡ хата ебәрелгән.

## Үҙ аллы эш №12. Тема: “Минең халҡымдың йолалары” темаларына реферат яҙыу.

Реферат – телдән йәки яҙма рәүештә бирелгән темаға мәғлүмәт еткереү.
Реферат яҙыу шарттары:
1. Бирелгән теманы ныҡлап өйрәнеп, анларға, төрлө текстар уҡып, һорауҙарға яуап бирелә.
2. Кәрәкле урындарҙы билдәләп, яҙып алына.
3. Реферат яҙыу буйынса план төҙөлә.
4. Йыйылған материалдарҙы туплап, реферат яҙыла.
5. Әҙер эште уҡыу, анализлау, дөрөҫләү.
6. Ҡағиҙә буйынса яҙма эште тәртипкә килтереү.

Реферат яҙыуҙың яҡынса структураһы:
1.Титуль бите.
2.Эштең яҙмаһы.
3.Ҡулланылған әҙәбиәт.

Баһалау:
Рефераттың төҙөлөүе, яҙылыуы 100балл менән баһалана:
- 86 – 100 балл – «5»;
- 70 – 85 балл – «4»;
- 51 – 69 балл – «3;
- 51 балдан түбән – «2».

## 4. Башҡорт теле буйынса зачет һорауҙары
## I бүлек. Башҡорт теленең грамматикаһы.

1. Башҡорт теле-дәүләт теле булараҡ.
2. Алфавит. Башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өн-хәрефтәре.
3. Сингармонизм законы. Яҙыу ҡағиҙәләре.
4. Баҫым. Һүҙҙең төҙөлөшө.
5. Һан.
6. Үҙ аллы һүҙ төркөмө - исем.

7. Башҡорт телендә ижек, килештәр.
8. Исемдәрҙең эйәлек заты категорияһы.
9. Исемдәрҙең хәбәрлек заты категорияһы.
10. Үҙ аллы һүҙ төркөмө - ҡылым.
11. Ҡылым һөйкәлештәре.
12. Ҡылым төркөмсәләре.
13. Ҡылым йүнәлештәре.
14. Алмаш.
15. Үҙ аллы һүҙ төркөмө - сифат.
16. Сифат дәрәжәләре һәм төркөмсәләре.
17. Рәүеш.
18. Рәүеш төркөмсәләре һәм дәрәжәләре.
19. Синонимдар.
20. Антонимдар.
21. Омонимдар.
22. Башҡорт телендә ярҙамсы һүҙҙәр:бәйләүестәр, теркәүестәр,киҫәксәләр.
23. Башҡорт телендә ярҙамсы һүҙҙәр: ымлыҡтар һәм мөнәсәбәт һүҙҙәр.
24. Һөйләм. Һөйләм төрҙәре (ябай һәм ҡушма).
25. Һөйләм. Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.
26. Пунктуация.
27. Фразеологизм.
28. Стилистика.
29. Лексика (һүҙҙәрҙең бер һәм күп мәғәнәлеге).

**II бүлек. Башҡорт теленән телдән һөйләү өсөн темалар.**

1. Башҡорттар. Башҡорт теле.
2. Сәләм. Танышыу. Һинең хоббийың.
3. Минең визиткам. Үҙем тураһында.
4. Минең дуҫтарым.
5. Һиңә нисә йәш?Минең туғандарыма нисәшәр йәш?
6. Минең ғаиләм. Шәжәрә һүҙе нимәне аңлата?
7. Йорт һәм ҡырағай хайуандар һәм ҡоштар.
8. Милли аштар.
9. Минең яратҡан әкиәттәрем(1-2 һайлап һөйләргә).
10. Һин ҡайҙан? Мин Башҡортостандан.
11. Йыл миҙгелдәре.
12. Башҡорттарҙың милли кейемдәре.
13. Башҡорттарҙың милли байрамдары.
14. Беҙҙең өй. Беҙҙең фатир.
15. Музыка ҡоралдары. Артистар.
16. Башҡортостан ҡалалары.
17. Ял итергә яратаһыңмы? Башҡортостанда ял йорттары, санаторийҙар.
18. Кейемдәр.
19. Һин ниндәй кеше? Һинең һөнәрең.
20. Яҙыусылар һәм шағирҙар.
21. Спортсмендар. Спорт уйындары.
22. Башҡорт бейеүҙәре. Ф.Ғәсҡәров ансамбле.
23. Минең халҡымдың ғөрөф-ғәҙәттәре һәм йолалары.
24. Минең республикам Башҡортостан. Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө.
25. Башҡортостандың билдәле шәһестәре(С.Юлаев, М.Аҡмулла һ.б.).
26. Рәссамдар.
27. Театр сәнғәте.

## 5. Информационное обеспечение


1. Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениялары өсөн. - Өфө: Китап, 2018.-264бит.
2. Тагирова С.А., Тулумбаева Э.Ю. “Интенсивный курс обучения башкирскому языку учащихся 7-11 классов русскоязычных школ”. – Уфа, 2018.
3. Башҡорт теле.ru. Интенсив курсҡа текстар: Башҡорт телен өйрәнеүселәргә телмәр үҫтереү өсөн текстар йыйынтығы. - Өфө, 2018.-52бит.
4. З.Ә.Һаҙыева, М.С.Дәүләтшина. Башҡорт теле – дәүләт теле. Эш дәфтәре. – Өфө. – 2018 й.-138бит.
5. З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле:башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениеларының 1курс студенттары өсөн.-Өфө:Китап,2018.-160бит.
6. З.М.Ғәбитова, С.А.Таһирова Башҡорт теле:башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған башланғыс һәм урта профессиональ белем биреү учреждениеларының 2курс студенттары өсөн.-Өфө:Китап,2018.-160бит.
7. Усманова М.Г.,Саяхова Л.Г., Киньягулова З.И. Башкирско-русский и русско-башкирский карманный словарь. Слова заимствования. Грамматика. Речевые образцы. Обновленный, дополненный, переработанный вариант.-Уфа:Учебно-методический центр “Эдвис”,2017.-288с.

Өҫтәмә:

8. Башҡорт теле. ru: Интенсив курс. Башҡорт телен өйрәнеүселәр өсөн дәреслек / Ф.Г.Хисамитдинова, М.Г.Усманова, Л.Ф. Моталова, С.А.Тагирова, Э.Д.Толомбаева, Л.С.Абуталипова. – Өфө: - 2018.-200бит.
9. З.М. Ғәбитова, Х.А.Толомбаев Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр. - Өфө, 2018.-96бит.
10. Ф.Г. Хисамитдинова. Башҡорт теле: Интенсив курс: Дәреслек – Өфө: Китап, 2018.
11. М.Г.Усманова. Грамматика башкирского языка для изучающих язык как государственный. – Уфа: “Китап”, 2018.
12. Башҡорт теленән электрон китап.
13. Яҙыусылар, Башҡортостан тураһында электрон дискалар.
14. httr://tel.bashgort.com/liles

## ЛИСТ ИЗМЕНЕНИЙ, ВНЕСЕННЫХ В КОС
## ОГСЭ 07. БАШҠОРТ ТЕЛЕ

| Учебный год | Вид изменений (объём времени, порядок освоения УД и ПМ и.т.п.) | В какой документ ППССЗ вносятся изменения | Конкретное содержание изменений | Экспертное суждение о необходимости и целесообразности внесения изменений | Подпись председателя ЦК/ представителей работодателей |
|---|---|---|---|---|---|
| 21.08.2019 | Изменение наименования образовательной организации | КОС | Автономная некоммерческая организация среднего профессионального образования «Бирский кооперативный техникум» переименован в Автономную некоммерческую профессиональную образовательную организацию «Бирский кооперативный техникум» | Решение о государственной регистрации Управления МинЮста РФ по РБ № 1351-р от 13.08.2019 | |